# Байконур космодромы ветераны

## Р. Хәбировтың 26 йыллыҡ хеҙмәте "Байконур космодромы ветераны" исеме менән билдәләнә

**Кешенең тәүге тапҡыр йыһанға осоу юбилейы бөтөн донъяла киң билдәләнә, сөнки йыһанға сәйәхәттәр дәүере шунан башлана. Эргәбеҙҙә шул ваҡиғаның сағылышын ярты быуат буйы үҙҙәрендә йөрөтөүсе кешеләр йәшәй. Шуларҙың береһе – Туймазыла йәшәүсе Р. Хәбиров.**

### Байконурҙы ләлә (тюльпан) сәскәләре биҙәй

Рәйес Хажимөхәмәт улы 1961-1987 йылдарҙа Байконурҙа хеҙмәт итә.

Ғорурланып "Бында бөйөк совет кешеһе ҡыйыулыҡ менән йыһанды яулай башланы" тип яҙылған миҙалын күрһәтә ул.

Хәбиров армия хеҙмәтенә Шаран районының Юғары Ташлы ауылынан саҡырыла. Һуңынан хеҙмәт срогын тултырғас Байконурҙа ҡалырға батырсылыҡ итә.

– Бындағы шарттар бик ауыр ине. Звездоград ҡалаһында йәшәнек, һуңынан ул Ленинск ҡалаһына әйләнде, бөгөн иһә Байконур исемен йөрөтә. Байконурлыларға хаттар "Хәрби часть, Ташкент-90" адресы буйынса килә ине, – тип иҫкә ала ветеран. – Ул дәүерҙә ҙур төҙөлөштөң төп объекттарын – старт майҙансыҡтарын төҙөргә кәрәк булды. Был эште башҡарыр өсөн 40 саҡырымдан ашыу тәрәнгә төшөп, миллион кубометрҙан артыҡ тупраҡ сығарырға талап ителде. Бер ниндәй ҙә техника юҡ ине. Йәйге туҙан бурандарына, ҡышҡы һалҡындарға ҡарамайынса, байконурлылар үҙҙәрен йәлләмәй хеҙмәт итте. Мин автомобиль хеҙмәте начальнигы булып эшләнем. Баш булараҡ, техника төҙөклөгө өсөн яуап бирҙем. Бер генә старт комплексы, техника торошо һәм үлсәү үҙәктәре лә машинаһыҙ эш итә алмай. Һалдаттар минең менән дежурҙа торорға яратты, сөнки иң ауыр эштәрҙе үҙем башҡарырға тырыша инем: двигателдәрҙе, машинаның йөрөү өлөшөн ҡарайым.

Рәйес Хажимөхәмәт улы яуаплы сараларҙа ла ҡатнаша. Звездоградта милиция хеҙмәте һәм хәрби автоинспекция булдырылғансы уҡ, уға сит ил вәкилдәре килгән ваҡытта юлдарҙа хәүефһеҙлек именлеген тәъмин итергә тура килгән. Францианан ҡунаҡтар килеүен хәтерләй ветеран, тантаналы процессия үтеү юлында 3 саҡырым хәрәкәт итеү өлкәһендә бер генә тере йән эйәһе лә йөрөргә тейеш булмаған.

Бөгөнгө көндә Мәскәүҙә һаҡланыусы тарихи экспонатҡа ҡағылышы булыуы менән дә ғорурлана ветеран. Уның бригадаһы старт майҙандарыныңбершахтаһында урынлашҡан тимер сыңғаны алыуҙа ҡатнаша. Халыҡ ҡаҙаныштары күргәҙ-мәһе павильонына "Восток" ысын ракета йөрөткөсөн урынлаштырыу өсөн кәрәк була ул. Электән йыһанға осоу өсөн тәғәйенләнгән, әммә шуның урынына күргәҙмә экспонатына әүерелә ул. Ошо махсус дәүләт заданиеһын яҡшы итеп башҡарған өсөн Хәбировты ракета ғәскәрҙәренең баш командующие рәхмәт хаты менән бүләкләй.




Ветеран Звездоградты – киң тура урамлы, йәшел ағаслы парктары булған ҡала икәнен әле лә йылылыҡ менән иҫкә ала. Ҡала ситендә, Һырдарья йылғаһы буйында, матур өс ҡатлы ҡунаҡхана торған, унда осоусы космонавтар йәшәгән, уҡыған һәм осорға әҙерләнгән. Рәйес Хажимөхәмәт улы донъя космик осоштарының яртыһынан артығырағы "Байконур" космодромында башҡарылғанлығын билдәләп үтте.

– Иртә яҙҙа Звездоградтың бөтә ерҙә лә ләлә сәскәләре асыла. Иҫ киткес матур күренеш! Ошо мөғжизә тураһында "Байконур ләләләре" тигән китап та яҙылған, – тине ветеран.

### Йыһанға осоу тураһында – алдынғылар һөйләүенән

Ошо йылдар дауамында Звездоградта уның менән бергә тормош иптәше Римза йәшәй. Йәш ғаиләнең торлаҡ шарттары уңайлы хәл ителә. Ике бүлмәле иркен фатир алалар. Ҡатыны балалар баҡсаһында тәрбиәсе булып эшләй, марксизм-ленинизм университетында уҡыуын тамамлағас, хәрби хеҙмәткә күсә. Оҙаҡ та үтмәй Илфир исемле улдары тыуа.

– Бала саҡта уҡ үҙенсәлекле урында йәшәүебеҙҙе аңлай инем, – ти кесе Хәбиров. – Йәштәштәребеҙ ысын космонавтарҙы күреү мөмкинлеге тураһында хыяллан-мағандыр ҙа. Беҙ иһә, һәр бер осош алдынан уларҙы сәскәләр гөлләмәһе менән ҡаршылай инек. Осоштан һуң, улар ял иткән ваҡытта, офицерҙар йортонда ҡала халҡы менән осрашыуҙар ойоштورола ине. Уларҙың йыһанға осоу тураһындағы хәтирәләрен беренселәрҙән булып тыңланыҡ. Сит ил космонавтары ла шулай уҡ беҙҙең ҡунаҡтарыбыҙ булды. Монгол Халыҡ Республикаһының тәүге йыһанға осоусыһы – Гуррагча килеүен хәтерләйем һәм Чехословакияның беренсе космонавы Владимир Ремек имзаһы ҡуйылған китапты әле лә һаҡлайым.

"Ул хәрби кейемдә ине. Беҙҙән, "ер" кешеләренән, айырылып тороуын аңлайбыҙ, әлбиттә. Уның бөхтәлегe ихтирам тойғоһо уятты", – тип Римза апай туңдырма алырға Леонов менән бер сиратта тороуын иҫенә төшөрҙө.

Космик ракета ебәрелеүе тураһында Хәбировтар сәғәттәр буйы һөйләргә әҙер: "Старт майҙансыҡтарының береһе йортобоҙҙан 30 саҡырым алыҫлыҡта урынлашҡан ине. Бөйөк ваҡиғаға ҡағылышың булыуын аңлағас, хистәр урғылып таша. Бында тулҡынланыу ҙа, күренештең матурлығы ла, космонавтар өсөн борсолоу ҙа бар. Сихырлаусы көс был: стартҡа бер-нисә минут ҡалыуға офоҡ ҡыҙыллана, яҡын-тирәләге йорттарҙың тәҙрәләре сылтырай башлай, бер минуттан ракета әкрен генә старт майҙансығынан айырыла һәм йыһанға юл ала..."

Байконурҙа тормош мәктәбен үткән кеше өсөн Ватанға һәм космодромға хеҙмәт итеү уларҙың төп эше булып ҡала. Әммә Рәйес Хажимөхәмәт улы Туймазыға килгәс, үҙ яҙмышын таба – мәҙрәсәлә курстар тамамлай, ислам шәриәтен, ғәрәп телен өйрәнә.

– Атайым мулла булған, әсәйем дә дин кешеһе, уларҙың юлын дауам итеү теләге ҙур булды. Дини йолалар менән таныштырыу – тимәк, үҙеңә ҙур яуаплылыҡ алыу, – ти Рәйес ағай. – Муллаға ҡарап, уның башҡарған эштәрен күҙәтеп, кешеләр ислам тураһында фекер йөрөтә. Шуға күрә дин әһеле бар яҡлап та тел тейҙермәҫлек булырға тейеш. Нәҡ ошо эш – минең тормош асылым.

***Г. ФАЗУЛЛИНА.***
***Ә. Арыҫланов фотоһы.***

---

## Ризаитдин Фәхретдинов: НӘСИХӘТТӘР



### Ашау ҡағиҙәләре

104. Ни ҡәҙәре оло ғәйебе булһа ла, аш алдында һис кемде лә шелтәләмәгеҙ һәм берәүҙе лә ғәйепләмәгеҙ.

105. Аштан һуң ҡул һәм ауыҙығыҙҙы һабын менән яҡшылап йыуығыҙ. Мөмкин булһа, йоҡламай бер аҙ ятып тороғоҙ.

106. Ҡайһы бер хайуандарҙың ите кешеләрҙең күңелен боҙғаны, дошманлыҡ, үс алыу, асыу тыуҙырғаны йәки йөрәкһеҙлеккә килтергәне өсөн, мөмкин булған тиклем үлән аштарын ашарға тырышығыҙ.

### Табын ҡағиҙәләре

107. Ҡунаҡ саҡырырға булһағыҙ, ғөрөф-ғәҙәт буйынса иртәрәк хәбәр итегеҙ.

108. Ҡунаҡтарҙы асыҡ йөҙ һәм хөрмәт менән ҡаршы алығыҙ. Һәр кемде урынына ултыртығыҙ.

109. Ниндәй генә ләззәтле булһа ла аштарығыҙҙы маҡтамағыҙ, ҡунаҡтарҙы ашарға ҡыҫтамағыҙ. (Бер ике мәртәбә әҙәпле генә әйтһәгеҙ зарар булмаҫ). Ҡунаҡ итеүсенең вазифаһы ҡунаҡтар алдына аш килтереү була. Ашау һәм ашамау ҡунаҡтарҙың ихтыярындалыр.

110. Ҡунаҡтарҙың һәр береһенең янында әҙерәк тороғоҙ, һөйләшегеҙ. Ҡайтҡандарында матур йөҙ менән хушлашып, рәхмәт әйтеп ҡалығыҙ.

111. Ҡунаҡҡа саҡырһалар, билдәләнгән ваҡыттан бер нисә минутҡа һуңлап барығыҙ. Йорт хужаһы менән шатланып күрешегеҙ.

112. Мөмкин булһа, үҙегеҙгә яҡын кешеләрҙең яндарына ултырығыҙ. Мәжлес һәм ашау ҡағиҙәләрен камил үтәгеҙ, Ни ҡәҙәре оҡшамаған аш килтерһәләр ҙә яратмағанығыҙҙы белдермәгеҙ. Ризыҡтары матур булманы, тип бәхәсләшмәгеҙ, ашарға теләгәндәрен ашағыҙ, теләмәгәндәрен әҙәпле генә ҡайтарығыҙ. Бүлеп алмағыҙ.

113. Аш тамамланғас, ҡулдарығыҙҙы йыуып, рәхмәт әйтеп, әҙәпле хушлашығыҙ.

114. Мәжлескә барырға ҡаршылыҡ килеп сыҡһа, бара алмауығыҙҙы белдереп, хәбәр ебәрегеҙ.

115. Бер кешегә барғанда икенсе берәүҙең мәжлесе, аштарының ләззәте булмауы йәки башҡа ғәйептәре булыуы тураһында һөйләмәгеҙ.

116. Саҡырмаған кешеләрҙең мәжлестәренә бармағыҙ.

117. Аш һәм туй мәжлестәре ойошторғанда, башҡаларҙан көнләшеп, хәлегеҙҙән артыҡ мал исраф итмәгеҙ.

118. Ваҡыт алтын кеүек ҡәҙерле булғаны өсөн бер сәғәттән артыҡ ваҡыт исраф итергә кәрәк мәжлестәргә бармағыҙ һәм кешеләрҙең ваҡытын исраф итәсәк мәжлестәрҙе лә йыймағыҙ.

---



# Олатайым – батырым

Олатайым Шайсолтан Муллағәли улы Ҡулиев Туҡтағол ауылында тыуған. 1940 йылда Совет Армияһы сафына хеҙмәткә алына. Күп тә үтмәй Бөйөк Ватан һуғышы башлана.

Олатайым разведчик булып яуҙа ҙур батырлыҡтар күрһәтә. Дошман тылына үтеп инеп, бер нисә тапҡыр «тел» алып ҡайта.

1944 йылдың февралендә ҡаты яралана. Уны иптәштәре дошман тылынан алып сыға. Аҙаҡ ун ай госпиталдә дауаланып ята. Яңынан һуғышҡа барыу өсөн яраҡһыҙ була, II төркөм инвалиды танытмаһын бирәләр уға.

Олатайым күп миҙалдар тағып тыуған ауылына ҡайта. Тыныс тормош башланғас, магазинда һатыусы булып эшләй. Ләкин һуғышта алған яралары сәләмәтлеген ныҡ ҡаҡшатҡан була. Ул ауырыуҙан мандый алмайынса, 1968 йылдың июнендә арабыҙҙан китеп бара.

Һәр йыл беҙ уның ҡәберенә сәскәләр һалабыҙ, үҙен хөрмәтләп иҫкә алабыҙ. Ә быйыл Бөйөк Еңеүҙең 66 йыллығын билдәләйәсәкбеҙ. Ошо еңеүҙә олатайымдың да ҙур өлөшө бар. Беҙ быының менән ғорурланабыҙ, уға лайыҡлы алмаш булып, матур, ғәҙел йәшәргә тырышабыҙ.

***Р. ҠУЛИЕВ.***
***Бишҡурай ауылы.***

Сығарылыш өсөн яуаплы – Гәүһәр Фазуллина.
Телефон 5-25-73.

**«Туймазы хәбәрҙәре» редакция-нәшриәт үҙәгендә баҫылды.
Адресы: Туймазы ҡалаһы, Мичурин урамы, 20Б.**

1414-се заказ.
Тиражы – 300 экз.